*Таңсулпан ҒАРИПОВА*

# Алтыны уның — ТЕАТР

Ижад... Мин уны тауҙарға оҡшатам. Тауҙарҙың да башланған, бейегәйгән, ҡапыл ҡая булып һынланған, уйылған, тағы ҡалҡҡан, түбәһе менән болот айҡаған урындары бар. Кешенең, ижад кешеһенең, ғүмере лә ана шул тауҙар кеүек төрлө миҙгел — һырттарҙан торалыр. Әйтәһе һүҙем Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай Башҡорт драма театрының художество етәксеһе һәм режиссеры Дамир Мәжит улы Ғәлимов хаҡында.

... Ул үҙенең Түбә руднигында үткән бала сағын бөтә тулылығында хәтерләп тә бөтмәй. Таусылар ҡасабаһындағы барлыҡ балалар кеүек, ул да, моғайын, «алтын фабригы»ның гөрләп эшләүен тыңлағандыр, «пар йырлаған тауышҡа заводҡа бегун йүгереүен» күргәндер; шунда үҫкән балалар кеүек, фабриканан йылынып сыҡҡан һыуҙа ҡойонғандыр; алтыны айырып алынған ҡом тауҙары — отвал башына ятып, Ирәндек тауҙарын хасил ҡылған Ҡараташ, Йәнгүҙәй, Күсемташ, Ҡырҡты һырттарына, улар өҫтөндә һәлмәк өйөрөлгән ҡыйғыр бөркөттәргә, сикһеҙ йыһанға баҡҡандыр; малайҙар менән бергә Сапсал һыуҙарында ҡойонғандыр... Моғайын, шулай булғандыр.

Мәгәр Дамир Мәжит улының хәтеренә башҡа иҫтәлектәр ҙә уйылған. Бына ул фабриканың тимер-томоро араһынан мең ыҙа менән тапҡан металл һыныҡтарынан сепаратор әтмәләп ала. Сепараторҙы ҡом тауына урынлаштыра. Борғосо ла бар. Сабый ҡулдарының шул борғосто һәлмәк кенә әйләндереүе була — һемәктән алтын таҫма төҫлө ҡом ағыла башлай. Ҡом ағылған урындарҙа ксскәй генә «алтын» түбәләстәр ҡалҡып сыға. Их! Әгәр ҙә шулар ысын алтын булһа! Бәлки, улар төн үтеп таң атҡансы ысынлап та алтынға әүерелер?!

Ләкин бәләкәй Дамирҙың хыялдарҙы хыялый яһар алтын бала сағы оҙаҡҡа һуҙылмай — дүрт йәшендә саҡта әсәһе Фәриҙә ханым ҡапыл донъя ҡуя. 1949 йылда Ғәлимовтар ғаиләһе ҙурыраҡ ҡасабаға — Сибайға күсә.

Тыумыштан теремек, аралашыуға әүәҫ Дамирҙы яңы урын да, етемлек тә

ҡаушата, баҙата алмай. Кәрәк булһа ул ойоҡбашын да, бейәләйен дә үҙе бәйләп кейә, тегенә лә, ямана ла. Мәгәр тиктормаҫ малайға былар ғына аҙ. Уға ҙур аралашыу кәрәк. Баймаҡ сиҙәм ерҙәр театры килһә, халыҡ ҡайһылай ағыла шунда! Тимәк, халыҡ тамаша ярата. Тамаша күрһәтһәң, халыҡты йыйып була. Бына, мәҫәлән, Дамир мәктәптә диафильм күрһәткәндәрен ярата. Йотлоғоп ҡарай. Ә ниңә әле шул диафильмдарҙы үҙенә күрһәтмәҫкә?! Диафильмдарҙың Магнит ҡалаһында һатылыуын ишеткәс, Дамир атаһынан аҡса һорап алыуға ирешә һәм, поездға ултырып, таң менән шул тарафҡа юллана.



Уйлаған эш— булған эш. Күп тә үтмәй, Дамирҙың солан тәҙрәһен ҡараңғылап эшләгән «кинозалына» малай-шалай, ҡыҙ-ҡырҡын йыйыла башлай. Күрше-тирәләге әбей-һәбей ҙә ситтә ҡалмай. Халыҡтың ҡыҙыҡһыныуын һүндермәҫ өсөн диафильмдарҙы гел алыштырып, яңыртып торор кәрәк. Дамир, билет хаҡына тотоп килгән йоморҡалар яңы фильмға етерлек булғас, һата ла тағы китә Магнитҡа. Тора-бара, ут биргәс, «велосипедлы тамаша» күрше ятҡан Һеңрән, Моҡас ауылдарына үтеп инә. Халыҡты мәҙәни яҡтан хеҙмәтләндереүҙе Дамир Мәжит улы Ғәлимов бына шулай башлай.

Йәш яғынан үҫкән һайын, Дамирҙың хыялдары ла үҫә: мәктәптә уҡып йөрөгән сағында уҡ Октябрҙең 40 йыллығы исемендәге Таусылар һарайында ҡурсаҡ театры ойоштора. Теләк булһа, ярҙам итеүселәре лә табыла: ҡурсаҡтарҙы Дамир Өфөнән ала. Үҙе актер, үҙе режиссер, етмәһә, рәссам да. Кәрәк булһа, йырлап та ебәрә! Әйткәндәй, һәр кемдең күңел түренә йәшеренгән хыялы ла була бит. Дамир бына, барып сыҡһа, йырсы булыр ине. Сәхнәлә тороп, ариялар, романстар башҡарыр ине. Тик уның өсөн ҙур ергә — Мәскәүгә китеп уҡыр кәрәк, тиҙәр...

Ваҡыт аҡкан һыу кеүек. Дамир Мәжит улы ла инде ҡала статусын алған Сибайҙа ун йыллыҡ мәктәпте тамамлай. Бер үк ваҡытта Октябрҙең 40 йыллығы исемендәге мәҙәниәт һарайында эшләгән художестволы үҙешмәкәрлектә ҡатнаша. Һәүәҫкәр артистарҙан торған бригадала ул бейеп тә, йырлап та йөрөй. Әйткәндәй, ул йылдарҙа Башҡортостандың халыҡ артисы Камил Вәлиев та шул түңәрәктә әүҙем ҡатнаша. Ижади көстәрҙең әүҙемлеге үҙ сиратында үҙенсәлекле менталитет тыуҙыра: 1961 йылда Сибайҙа Закир Зөбәйеров етәкселегендә халыҡ театры ойошторола. Хәҙер Сибайҙағы дәүләт театры статусын алған «Сулпан» балалар театрының базаһы ана шул йылда барлыҡҡа килә лә инде. Дамир Ғәлимов ошо театрҙа эшләй, әммә егәрле егетте Ленинград ҡалаһына Мәҙәниәт институтына уҡырға ебәрәләр. Дамир Мәжит улы институттың режиссерҙар факультетын һайлай. Бында ул Георгий Александрович Товстоногов, Аркадий Осипович Кацман кеүек сәхнә оҫталары, аҡыл һәм ғилем әһелдәренән белем ала. Ленинградтың юғары сәнғәт рухы менән тулышҡан һауаһы, театрҙары зиһенле егеткә тәьҫир итмәй ҡалмай, әлбиттә. Ошонда күргәндәрен, тыуған ҡалаһына ҡайтып, туған коллективында эшләп ҡарау теләге көндән-көн нығыраҡ көсәйә. Күргән либретто, оперетта, водевиль кеүек жанрҙарҙы ла сәхнәгә ҡуйып та, уйнап та ҡарар ине ул. Һәм, ғөмүмән, быңдағы сәхнә культураһы, тамашасының зауығы, халыҡтың эстетик кимәле таң ҡалдыра уны, һоҡландыра. Уның тыуған ерендәге тамашасы ла кистәрен матур кейемдәрен кейеп, йылы, яҡты, күтәренке залдарға спектакль ҡарарға килергә хаҡлы бит!

Тынғыһыҙ тәбиғәтле, бөтә яңылыҡты үҙенә һеңдереп барыусы егет ваҡытын институт стеналарына ғына бикләнеп үткәрә алмай. Хореография, балет студияларына йөрөй. Сығарылыш талиптарының диплом эше итеп М.Горькийҙың «Тормош төпкөлөндә» пьесаһы ҡуйыла, Дамир Ғәлимов унда Алеша ролен уйнай.

1966 йылда, институтты тамамлап ҡайтҡас, Дамир Мәжит улын ҡасандыр үҙе ҡурсаҡ театрын ойоштороп, художестволы түңәрәктәрҙә бейеп, йырлап, халыҡ театрында уйнап йөрөгән мәҙәниәт һарайының директоры итеп тәғәйенләйҙәр.

Тап ошо йылдарҙа, Күсей ауылы клубының мөдире булып эшләп йөрөгән сағымда, Сибай мәҙәниәт һарайының бейеү коллективы беҙҙең ауылға килде. Шәмдәр менән генә яҡтыртылған ауыл клубы артистар килеп инеү менән тауис ҡойроғолай төрлө төҫтәр балҡышына күмелде. Бейеүҙәрҙең төрлөлөгө, башҡарыусыларҙың, бигерәк тә Дамир Ғәлимов һәм Людмила Шубинаның дәртле хәрәкәттәре бындай тамашаны күрмәгән халыҡтың һушын алды. Бына был, исмаһам, сәнғәт! Бейеү труппаһы иртәнсәк икенсе ауылға юлланды. Әммә минең, ун туғыҙ йәшлек ауыл ҡыҙының, зиһенен билдәһеҙ, ләкин көслө ынтылышҡа сорнаны, рухыма саялыҡ өҫтәне, дәртемә дарман бирҙе. Сәнғәттең әҙәм тойғоһона тәьҫир итер көсөн мин беренсе тапҡыр шунда татыным...

Был бейеү коллективының сығышын миңә башҡаса күрергә тура килмәне. Әле бына Башҡортостандың һәм Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Дамир Мәжит улы менән һөйләшеп ултырған арала шуны асыҡланым: 1967 йылда уны театрға саҡырғандар. Артист Хөсәйен Ҡәйүмов ауырып киткән дә — шуның урынына. Ошонан башлап Дамир Мәжит улының биографияһында профессиональ театр эпопеяһы башлана. Бер аҙ ваҡыт Сибай ҡала советының мәҙәниәт бүлеге мөдире булып эшләп алыу йылдарынан башҡаһы театр менән айырылғыһыҙ бәйләнгән. 1972—1981 йылдарҙа Халыҡ театрында директор һәм режиссер булып эшләгән йылдарында Ә.Атнабаевтың «Ул ҡайтты», И.Абдуллиндың «Гөлмәрфуға», Х.Ибраһимовтың «Башмағым», Б.Бикбай, З.Исмәғилевтең «Ҡоҙаса», ғөмүмән, егермегә яҡын спектакль сығара.

Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай башҡорт дәүләт театрында 1988 йылдан бирле директор һәм художество етәксеһе булып эшләгән йылдар Дамир Ғәлимов ижадының иң бейек нөктәһеләр, моғайын. Ул ҡуйған пьесаларҙың идея-тематик йүнәлеше ифрат күп төрлө: Н.Ғәйетбайҙың «Һөйәркәңде шкафҡа йәшер», « Төн», «Ҡартаямы һуң йөрәк?» әҫәрҙәре; Флорид Бүләковтың «Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?», «Ҡыҙҙар ни өсөн илай?», Буранбай Исҡужиндың «Һуңғы аҡсарлаҡ», Н.Асанбайҙың «Рәйсә+Фәйзи», Т.Ғарипованың «Төштәге йыр» драмалары; Б.Бикбай, З.Исмәғилевтең «Ҡоҙаса», К.Тинчуриндың «Ҡазан һөлгөһө» исемле музыкаль комедияһы, Р.Кинйәбаевтың «Байтимер дуҫ»ы, Т.Ғәниеваның «Тамарис»ы ... Мине, Сибай театрының эшмәкәрлегеменән яҡындан таныш кешене, Дамир Мәжит улының тәүәккәллеге һоҡландырҙы. Башҡа театрҙар үҙгәртеп ҡороуҙар, идеологиялағы боролоштар осоронда репертуар ҡытлығы көрсөгөнә төртөлгәндә, ул исемдәре драматургия донъяһында быға(са) билдәле булмаған авторҙарға мөрәжәғәт итте; театрҙар матди ҡыйынлыҡтар кисергән осорҙа Сибай театры коллективы 13-сө эш хаҡы алып ятты; театрҙар гастролдәр тураһында хыялланған ғына саҡта Сибай театры, ауылдан-ауылға йөрөп, йоморҡаға булһа ла халыҡҡа тамаша күрһәтте. Һуғыш ваҡытында ла халыҡҡа барып етер театр ҡытлыҡ осоронда ла традицияларына тоғро ҡалды.

Миңә Дамир Ғәлимовтың репетицияларын да күҙәтергә тура килде. Администратор булараҡ ҡаты ғына күренгән Дамир Мәжитович режиссер вазифаһында бөтөнләй икенсе ҡиәфәткә инә. Бүтән саҡта ут сәскән ҡараштары йомшара, тауышы баҫалҡылана. Артистарға бер ҡаты һүҙ ҙә әйтмәй — икһеҙ-сикһеҙ түҙемлектең үҙенә әйләнә... «Иң ҡыйыны — репертуар һайлау, — тине Ғәлимов әңгәмәләшкәндә. — Тәүге тәьҫорат — алдатҡыс. Пьесаны уҡығандан һуң ике аҙна үткәс кенә ныҡлап уйлана төшәм: был әҫәре менән автор нимә әйтмәксе? Уның әйтергә теләгән һүҙе тамашасыға ниндәй йоғонто яһар? Сәнғәт тамашасының эстетик кимәленән кәмендә ике башҡа юғары торорға тейеш. Тормошта булған хәлдәрҙе спектакль итеп сығарыу өсөн генә күп аҡыл кәрәкмәй. Унан һуң, әҫәр оҡшаһа ла театрҙың ул әҫәрҙе ҡуйырға көсө етмәгән осрағы ла булғылай. Мәҫәлән, беҙҙә академия театрҙарының мөмкинлектәре юҡ. Эйе, театрҙың йөҙөн репертуар билдәләй».

Миңә ҡалһа, театрҙың йөҙөн режиссер ҙа билдәләй. Беренсенән, репертуар һайлау режиссерҙан тора, икенсенән, әҫәрҙең уңышы — режиссерҙың аҡыл һәм оҫталыҡ емеше. Бына уның хаҡында башҡорт драматургияһының аҡһаҡалы Нәжиб Асанбай «Ҡыҙыл таң» гәзитендә ниҙәр яҙа: «Дамир Ғәлимов бынан бер-нисә йыл элек кенә беҙҙә «Ҡоҙаса» музыкаль комедияһы менән шатландырып киткәйне. Быйыл иһә ул бөтөнләй «шашты!» Меңдәрсә тамашасыны Сибай театры сәхнәгә бәйләп ҡуйҙы. «Бына һиңә режиссер!», «Бына һиңә Ғәлимов!» тип шатланып ултырам».

Минең үҙемә Дамир Мәжит улының ниндәй режиссер икәнен үҙемдең әҫәр — «Төштәге йыр»ҙы сәхнәләштергәнендә күҙәтергә тура килде.

Пьесаны уҡыу, төшөнөү ваҡыты ғына ике айға һуҙылды. Әҫәрҙәге персонаждарҙың һәр һүҙенә ентекле анализ яһалды. Сәхнәлә ҡуйылған тәүге пьесам булараҡ, мин артистарҙың мезансценаға сығырҙан алда әҫәр өҫтөндә ни өсөн шулай оҙаҡ ултырғандарын аңламай ҙа инем. Репетициялар ауырлыҡ менән барҙы. Көн дә тиерлек мине саҡырып алдылар. Түҙемем бөттө. «Әллә былар минең был әйберҙән баш тартырға уйлайҙармы икән? — тигән уй ҙа килә башҡа. Аҙаҡ ҡына төшөндөм: тамашасы ҡарамағына тапшырылған һәр спектакль оҙайлы ваҡыт һәм оло ғазап, режиссерҙың һәм актерҙарҙың, сценографтың һәм композиторҙың тынғыһыҙ көндәре, йоҡоһоҙ төндәре аша донъя күрә. «Төштәге йыр»ҙың уңышын тамашасы ла, Мәскәү һәм Башҡортостан театр белгестәре лә билдәләне. Шуны әйтә алам: спектакль уңышының кәмендә алтмыш проценты режиссерҙыҡы. Мәҫәлән, минең пьесала йорт ике ҡатлы түгел ине. Күптәр, нимәгә кәрәк булды икән Дамирға был тиклем дәү декорация, тип баш ваттылар. Ә режиссер уны төптән уйлап хәл иткән: өҫкө ҡатҡа, халҡыбыҙҙың иман ҡотон йөрөткән Гөлзада менән гонаһһыҙ сабый — уның ейәне ултырған, йәшәгән ҡатҡа, спектакль барышында бер кем дә аяҡ баҫмай. Тик һуңынан, Гөлзаданың улы Хөснулла һәм килене Нәркәс, олоғара кисерештәр, ғаилә трагедияһын кисергәс, күңелдәре менән таҙарынғас һәм пакланғас ҡына, ана шул ҡатҡа, өр-яңы рухи баҫҡысҡа күтәреләләр. Икенсенән, әҫәрҙә төп герой — йыр. Был йыр Гөлзада күкрәгендә ярала. Йыр ғаилә ағзалары оло һынау ҡаршыһында торған саҡта яңғырай. Гөлзада йыры улы Хөснулланы үҙ-үҙенә ҡул һалыуҙан аралай; килене Нәркәсте хата аҙым яһауҙан әрсәләй; ейәне Азатты рухи һәм физик үлемдән йолоп алып ҡала. Минең пьесала был шулай, ә бына спектаклдә режиссер йырға тағы бер үҙенсәлек индергән: барлыҡ персонаждар ҙа уны ишетеү һәләтенә эйә түгел! Нурихан да, Зәмзәм дә был йыр ҡотон ишетеүҙән мәхрүмдәр... Пьесала Гөлзада ғөмүмән йөрөмәй ине. Ә спектаклдә, улына фажиғә — үлем ҡурҡынысы янағас, ул баҫҡыстан төшә башланы. Хөснулланы һуңғы саранан, бәлки, ошо аҙым әрсәләгәндер?! Эй әсәлек! Эй уның бөйөк ҡөҙрәте! Был күренеште тамаша залындағы бер кеше лә күҙ йәшһеҙ ҡарай алмағандыр. Спектаклгә йән өргән бындай деталдәрҙе тағы әллә күпме һанарға булыр ине. Арҙаҡлы йырсы Флүрә Килдейәрова репертуарына ингән, Юлай Үҙәнбаевҡа Бабич премияһына өлгәшергә булышлыҡ иткән Гөлзада йырының тыуыуының да шаһиты булдым. Шағир булмағас, һүҙҙәрен ауырлыҡ менән тыуҙырҙым, ә көйөн Юлай ижад иткәндә уның янында һәр саҡ Дамир Ғәлимов торҙо: «Былайыраҡ кәрәк, бына былай...» Күрәһең, Дамир Мәжитовичтың ҡасандыр йырсы булырға хыялланыуы тиктәҫкә булмағандыр... Спектаклдең премьераһын зал аяғүрә баҫып алҡышлаған саҡта режиссерҙың күҙҙәрендә йәш ҡатыш балҡыш күрҙем, ә мин үҙем иһә, репетицияларҙы ҡарап, арманһыҙ булып, арып, битарафҡа әйләнеп бөткәйнем...

Нәжиб Асанбаев өҫтә атап киткән мәҡәләһендә: «...Ғәлимов спектаклдән спектаклгә үҫә барҙы. Хәҙер уны, һис шикһеҙ, Башҡортостандың иң талантлы режиссеры, тип әйтергә була», — тип тә яҙғайны. Мин театр уҙаманының был һүҙҙәренә «иң тәүәккәл режиссеры» тигән һүҙҙәрҙе лә өҫтәр инем. Әйткәнемдең дөрөҫлөгөнә дәлил итеп Тамара Ғәниеваның «Тамарис»ының Сибай театры сәхнәһендә башлап донъя күреүен атар инем. Уны сәхнәләштереп, Дамир Ғәлимов икеләтә тәүәккәллек эшләне: беренсенән, кемдең булһа ла тәүге

әҫәренә тотоноуы еңел түгел. Икенсенән, «Тамарис» нисә йылдар инде режиссерҙарҙың папкаһынан сыҡманы. Талҡаҫтағы драматургтар семинарында тикшерелгәс тә уға тотонорға бер кем дә йөрьәт итмәне. Ә бына Ғәлимов тотондо. Әҫәрҙең идеяһы менән сихырланған режиссерҙы костюмдарҙың ҡатмарлы булыуы ла, уйналаһы күренештәрҙең быуаттар төпкөлөндә ҡалған цивилизацияға ҡарауы ла баҙатманы. «Ҡоҙаса», «Ҡазан һөлгөһө», «Башмағым» спектаклдәре аша күмәк күренештәрҙе сәхнәләштереү оҫталығына өлгәшкән режиссер «Тамарис»та ла ҡаушамаған; сәхнәгә бейеү, пластика аша килгән белгес булараҡ, «Тамарис»та ла ул күп әйберҙе пластика аша һынландырыуға өлгәшкән. Пьеса, әҫәр булараҡ, киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнмәгән кеүек. Әммә тамаша булараҡ, ул бер кемде лә битараф ҡалдырмай. «Тамарис» ифрат динамикалы спектакль. Көсөргәнеш һәм хәл-ваҡиғаларҙың етеҙ үҫешеүе режиссерҙың һәм фәҡәт режиссерҙың оҫталығы.

«Тамарис»та төп идея — ватансылыҡ. Режиссер ошо идеяны күренештән күренешкә күсерә, спектакль аҙағынаса һаҡлай алған. Ул дәүер кешеләренең тәбиғәт менән бәйләнеше әсә менән сабый кендек менән бәйләнгән кеүек. Спектаклдә персонаждарҙың күҙҙәре күккә йүнәлгән, ҡулдар Ҡояш-Тәңре тарафына антенна кеүек һуҙылған. Спектаклдә бүре — төркиҙәрҙең ҡот-кейеге образы ла — үҙенсәлекле файҙаланылған. Бүре олоуы берсә оран, берсә үкенес, берсә киҫәтеү булып яңғырай.

Дамир Мәжит улы Ғәлимовҡа быйыл илле биш йәш тулды. Шул ғүмерҙең кәмендә ҡырҡ йылы үҙәктән алыҫ ятҡан Урал арьяғы тип аталған төбәк халҡына хеҙмәт итеүгә бағышланған. Көндө төнгә, төндө көнгә ялғап, тәүлектәге егерме дүрт сәғәтте ҡырҡҡа бүлерҙәй булып янып йәшәгән тормошонда үҙе тураһында уйлар ваҡыты ла ҡалмай торғандыр уның. Әммә һәр яңы пьесанан спектакль эшләргә тотонған саҡтарында хәтеренә ҡом тауы өҫтөндә «алтын» айыртып ултырған ныҡыш малай төшәлер. Тик сепараторы уның — театр, ә алтыны — йөрәгенең көсө менән, күңелен асмандарға аштырып тыуған спектаклдәре.



Тамара Ғәниеваның «Тамарис» трагедияһынан бер күренеш